


# Т ан олатайҙарым

## Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына ҡарата

Әҙерләне: Заһитова Диана

Уҡытыусыһы: Ибракова С.Ә.

Матурлығы өсөн был көндәрҙең
Кемдәр генә ҡорбан булмаған!
Исемдәрен тарих беҙгә үҙе
Һаҡлап килә йыраҡ йылдарҙан!
Тыуған ил хаҡына,
Тыуған ер хаҡына
Ауылдаштар башын һалдылар
Беҙҙең ғүмер өсөн улар
Мәңгегә сит илдә ҡалдылар!

Кешелек тарихында булған иң яуыз һуғыштарҙың береһе – ул Бөйөк Ватан һуғышы.Унының тамамланыуына быйыл етмеш йыл була.Күп вакыт кеүек.Тик был һуғыштың күрһәткән яуызлығы,күз йәштәре,етем балалар һәм ҡатындар һыҡтауы,тугелгән ҡан уны онотттормай.Һуғыш тураһындағы материалдарҙы уҡығанда ла иҫ китәрлек.Һәр бер һан артында күпме ҡайғы, күпме күҙ йәше…

Ошо дәһшәтле һәм ҡурҡыныс һуғыш менең ҡарт ҡартатайымдарҙың ғаиләләрен да урап үтмәгән. Улар ҙа тыуған иле өсөн йәндәрен аямай һуғышҡа киткәндәр. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы бөтәһе лә тыуған яҡтарына иҫән-һау әйләнеп ҡайта алмағандар.

Шуларҙың араһынан иң беренсеһе **Назаров Зәйнулла** олатайым (әсәйемдең әсәһе Сәрүәрә өләсәйемдең атаһы). Улар дүрт бер туған: Сәхиулла, Зәйнулла, Барый һәм Самат Назаровтар Бөйөк Ватан һуғышына китәләр. Уларҙың ололары Сәхиулла менән Зәйнулла һуғышта үлеп ҡалалар. Барый менән Самат Назаровтар иҫән-һау әйләнеп ҡайталар. Ләкин Самат Назаров һуғышта ҡаты яраланып, беренсе группа инвалиды булып ҡайта. Күп йылдар Төрөмбәт урта мәктәбендә уҡытыусы булып эшләй.


Назаров Сәхиулла
Назаров Зайнулла
Назаров Барый
Назаров Самат

**Заһитов Хәйервара Ғүмәр улы**
( атайымдың атаһы Әсҡәт ҡартатайымдың атаһы). Ул 1906 йылда Төрөмбәт ауылында тыуған.Бөйөк Ватан һуғышына мең туғыҙ йөҙ ҡырҡ икенсе йылда киткән. Тыуған иле өсөн һуғышып ул Германия еренә хәтлем барып еткән. Еңеү көнөн шунда ҡаршылағандар. Мең туғыҙ йөҙ ҡырҡ бишенсе йылда тыуған яғына иҫән-һау әйләнеп ҡайтҡан. Әсҡәт ҡартатайым атаһының һуғыштан ҡайтҡанын әле лә хәтерләй.


107
Заһитов Хөйервара
Ғумәр улы

**Данъялов Хабибрахман Лутфрахман улы** (атайымдың әсәһе Минира өләсәйемдең атаһы). Ул 1906 йылда Күккәзә ауылында тыуған. Бөйөк Ватан һуғышына мең туғыҙ йөҙ ҡырҡ икенсе йылда китеп тик 1948 йылда ғына әйләнеп ҡайтҡан. Улар бер төркөм немец һалдаттарын ҡулға алып, уларҙы Воркута яғына пленға алып киткәндәр. Һуғыштан иҫән-һау әйләнеп ҡайтҡас олотайыбыҙ оҙаҡ йылдар сельпола эшләп хаҡлы ялға сыҡҡан.


109
ДАНЪЯЛОВ
ХАБИБРАХМАН

**Ибраков Хәсән Йәғәфәр улы** (әсәйемдең атаһы Айҙар ҡартатайымдың атаһы Фәнил ҡартатайымдың атаһы). Ул Төрөмбәт ауылында тыуған.  Бөйөк Ватан һуғышына китеп әйләнеп ҡайтмаған.



Ә унының улы, йәғни Фәнил ҡартатайымдың ағаһы, **Ибраков Әмерхан Хәсән улы** һуғыштан иҫән-һау әйлйнеп ҡайтҡан. Ул.1924йылда Төрөмбәт ауылында тыуған. 1941 йылда Бөйөк Ватан һуғышына китә. 399-сы уҡсы полкында башта кесе сержант , һуңынан өлкән лейтенант званиеларында һуғыштарҙа ҡатнаша. Еңеүҙе Германия ерендә ҡаршылай. Ике «Ҡыҙыл йондоҙ”, “ Бөйөк Ватан һуғышы” ордены, “ Батырлыҡ өсөн”, “Варшаваны азат иткән өсөн”, “Германияны еңгән өсөн” миҙалдары менән наградлана.



**Ибраков Әмерхан Хәсән улы**

1924 йылда Төрөмбәт ауылында тыуған. 1941 йылда Бөйөк Ватан һуғышына китә. 399 –сы уксы полкында башта кесе сержант, һуңынан өлкән лейтенант званиеларында һуғыштарҙа катнаша. Енеүҙе Германия ерендә каршылай.

Ике «Ҡызыл йондоҙ»,«Бөйөк Ватан һуғышы» ордены, «Батырлыҡ өсөн», «Варшаваны азат иткән өсөн», «Германияны еңгән өсөн» миҙалдары менән наградлана.

**1924-1964 й.**


Ибраков Әмерхан Хәсән
улының наградалары

**Ильясов Сәғетдин Латип улы**. (әсәйемдең әсәһе Нурия өләсәйемдең атаһы Шәйхетдин ҡартатайымдың атаһы). Ул да башҡалар кеүек  тыуған иле өсөн дошмандарға ҡаршы һуғышҡа китә. Күп яфалар сигеп, дошмандарға ҡаршы һуғышып олотайым иҫән-һау тыуған яҡтарына әйләнеп ҡайта.


ИЛЬЯСОВ СӘҒЕТДИН
ЛАТИП улы

Бына шундай үлем белмәç ҡартатайҙарым минең! Мин улар менән бик ғорурланам. Улар беҙ яҡшы һәм тыныс донъяла йәшәһен өсөн йәнен-тәнен аямай һуғышҡандар, батырлыҡтары менән беҙгә тыныслыҡ бүләк иткәндәр. Тиңһеҙ ҡаһарманлыҡтары алдында баш эйәбеҙ һәм оло рәхмәттәребеҙҙе белдерәбеҙ.

Беҙ ветерандарҙы һәр ваҡыт иçтә тоторға тейешбеҙ. “Илебеҙ башҡа бер ҡасан да һуғыш күрмәһен!” – тигән изге теләктәребеҙ тормошҡа ашһын.


Ветерандар, бөгөн һеҙҙең күҙгә
Тәрән хөрмәт менән бағабыҙ,
Яуҙа калғандарҙы иҫкә алып,
Һәйкәлдәргә сәскә һалабыҙ.


Беҙ иҫләйбеҙ,
Беҙ ғорурланабыҙ!